Хәйерле көн һеҙгә, хәйерле көн,

Хәйерле көн, дуҫтар, туғандар,

Хәйерле көн һеҙгә, донъя йөгөн

Йөкләп барған ирҙәр, уландар!

Хәйерле көн һеҙгә, сос ҡатындар,

Донъя күрке – изге әсәләр!

Хәйерле көн һеҙгә, эшсән ҡыҙҙар,

Ер биҙәге – яҙғы сәскәләр.

*Зәйнәб Биишева һүҙҙәре*

*Заһир Исмәғилев көйө*.



Башҡортостандың бөйөк композиторы

# Заһир Исмәғилев

**(1917-2003)**

Исмәғилев Заһир Ғарип улы 1917 йылдың 8 ғинуарында Башҡортостандың Белорет районы Сәрмән ауылында, урман ҡырҡыусы ғаиләһендә донъяға килә.

Бала сағынан уҡ, буласаҡ композитор халыҡ йырҙарын тыңлай, ҡурайҙа уйнай.



**Өфө урман техникумына уҡырға инә тик уны тамамламай, уны башҡорт драма актеры Арыҫлан Мөбәрәков Өфө драма театрына эшкә саҡыра.**

**1937 йылда Мәскәү дәүләт консерваторияһының башҡорт студияһына уҡырға инә.**



Заһир Исмәғилев менән Арыҫлан Мөбәрәков, 1937 йыл.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Өфөлә эшләй, фронт бригадаларының концерттарында ҡатнаша, патриотик рухтағы йырҙар яҙа.



Студияла уkыуын тамамлағас, ул композиторлыk факультетын тамамлай.

1958 йылдан алып БАССРҙың композиторҙар союзы председателе, Өфө сәнғәт институтын төҙөүсе һәм уның беренсе ректоры.



Композиторҙар съезында Александра Пахмутова һәм Филипп Лукин менән.

Заһир Исмәғилевтың әҫәрҙәре СССРға һәм сит илдәргә тарала. Унның әҫәрҙәренең төп үҙенсәлеге - ул башҡорт музыка фольклоры менән тығыҙ бәйләнеше.

Заһир Исмәғилев 2003 йылдың 30 майында Өфөлә оҙаҡ ауырығандан һуң вафат була.

**2007 йылды беренсе Заһир Исмәғилев исемендәге халыk-ара музыканттар конкурсы үтте. Уны йыл һайын уҙғарып торорға тигән kарар kабул ителде.**

*******

**Композитор тере сағында уk унын тыуған ауылы Сәрмәндә музей асыла.**

*******

**2006 йылды Өфөләге яңы урамға Заһир Исмәғилев исеме бирелгән. Шулай уk Белорет районының Сәрмән ауылында ла З.Исмәғилев исемле урам бар.**

*Заһир Исмәғилевкa бирелгән исемдәр, наградалар һәм премиялар:*

-СССРҙың халыk артисты

-РСФСРҙың халыk артисты

-БАССРҙың халыk артисты

-РСФСРҙың Глинко дәүләт премияһы лауреаты

-Башkортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты

-Ленин ордены кавалеры, Kыҙыл хеҙмәт байрағы, Халыkтар дуҫлығы, «Почет билдәhе» наградалары менән бүләкләнгән.

# Заһир Исмәғилев менән Мостай Кәрим







Композиторҙың 50 йәшен байрам иткәндә.





Заһир Исмәғилев ҡыҙы - композитор Ләйлә менән



Композитор ғаиләһе менән – ҡатыны Мәғсүфә, ҡыҙы Гүзәл һәм ейәне Таир.

*Төп әҫәрҙәре*:

Опералары: «Ағиҙел тулҡындары» (1972),

«Салауат Юлаев» (1955),

«Урал илселәре», «Ҡаһым түрә», «Шәүрә».

Музыкаль комедиялары: «Ҡоҙаса», «Алмаҡай» һ.б.

# «Ағиҙел тулҡындары» операһынан сцена.



# «Салауат Юлаев» операһынан сцена.






# 2008 йылдың 18 октябрендә Өфөлә Заһир Исмәғилевкә һәйкәл ҡуйыла.







Р.Нурмөхәмәтов. Композитор З.Исмәғилев портреты. 1974 йыл.

# Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы







*«Батырҙар йыры».*

Эйәрле ат беҙ менгәндәр
һау булығыҙ йән һөйгәндәр
Ил саҡыра изге яуға, ҡылыс билҙәрҙә
Бәйге түгел яу ҡырҙары
Мөмкин булмаҫ ҡайтыуҙары
Барыбыҙға бәлки кире тыуған илдәргә.

Алдыҡ яра йә үлдек беҙ
Үлем бар тип белмәнек беҙ
Үттек илдәр, үттек юлдар изге яуҙарҙа
Булманы башҡорт ҡайҙарҙа
Ат эсерҙе яҙгы айҙа
Висла, Ордер, Дунай тигән йыраҡ ярҙарҙа.

*«Шайморатов генерал»*

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;
Ат уйнатып, алдан бара
Шайморатов генерал.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай —
Һай, батыр ҙа ир икән.

Башҡорт тигән ир намыҫлы
Улдар үҫтергән Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал.